*Земфира ҒИРФАНОВА,*
*«Башкортостан» телерадиокомпанияһының*
*йәштәр студияһы хәбәрсеһе*

# ЕЛКӘНЛЕ КҮҢЕЛ

Үткән быуаттың 80-90-сы йылдары. Мәскәү дәүләт университетын тамамлаған бер төркөм ҡыйыу журналистарҙың мәҙәни донъябыҙға дәррәү ҡушылып киткән сағы. Ғәбиҙулла Зарипов, Рәйес Түләк, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Әхмәр Үтәбаев... Шул осор йәштәре араһында Фәрзәнә Аҡбулатова ла бар. Яңы идеялар менән ҡанатланып ҡайтып, «Башҡортостан» («Совет Башҡортостаны») гәзите редакцияһында эш башлағайны. Матбуғат биттәрендә хикәйәләре, мәҡәләләре күренде. Гәзит-журнал уҡыусылары уны тиҙ таныны. Етәкселәрҙең дә иғтибарынан ситтә ҡалманы ул.Тиҙҙән «Башҡортостан» телерадиокомпанияһының радиостудияһына эшкә күсә. Бына шул көндән алып Фәрзәнәнең яғымлы тауышы «Тулҡын» программаһында яңғырай башлай. Ярты сәғәтлек тура эфирҙа кемдәр менән генә осрашманы ла, ниндәй шәхестәр менән беҙҙе таныштырманы! Унық тапшырыуҙары көтөлмәгән яңылыҡ, фекер алышыу, өр-яңы ҡарашлы булыуы менән радио тыңлаусыларҙы үҙенә йәлеп итә. Әҙәбиәт, мәҙәниәт, шәхес һәм башҡа донъяуи мәсьәләләр уртаға һалып тикшерелә. Тырыш әҙибә нәфис әҙәбиәттә лә ҡолас йәйеп ижад итә һәм 1995 йылда «Атай икмәге» тигән китабы, «Ҡорбанлыҡ йәки ябай ғына алыш-биреш» повестары өсөн Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһына лайыҡ булды.

Бөгөн ул «Башҡортостан» телерадиокомпанияһының радиостудияһында «Ижад» берекмәһен етәкләй. Һәр ваҡыт үҙенең булмышының, рухи донъяһының, маҡсатлы йәшәйешенең нигеҙе итеп Башҡортостанды, Хәйбулла районын, ата-әсәһен алған. Әле лә, үҙе хаҡында һорашҡанда, һүҙҙе ошо юҫыҡҡа борҙо.

— Әлбиттә, кеше тәрбиәһендә ата-әсәйҙең роле ифрат ҙур: баһабыҙ ҙа, һүҙебеҙ ҙә, рәхмәтебеҙ ҙә уларға аҙ кеүек. Әммә оло быуын кешеләренең дә йоғонтоһон онotorға ярамай. Беҙҙең өйҙә ҡартәсәйем үҙе бер ҡот, тулы йәм һәм тере тарих ине. Ҡартәсәйем Камила революцияға тиклем тыуғас, дини тәрбиә алып өлгөргән. Һәр ваҡыт милли кейемдә йөрөй торғайны. Ғаиләбеҙҙең оло быуын вәкилдәре, уларҙың туғандары беҙҙе боронғо тарихыбыҙ менән бәйләп торҙо. Улар күңеле аша беҙ тарихты үҙ асылында ҡабул иттек, төрлө ваҡытлы сәйәсәт йоғонтоһонда йөрөгебеҙ ҡатып ҡалманы. Тормоштоң барлыҡ ауырлығын, михнәтен үҙ иңендә күтәргән, сабыр итеп, намыҫлы ғүмер кисергән оло быуын мөхитендә үҫергә насип булды миңә. Уларға һоҡланып та, ғәжәпләнеп тә туйманым.

Ысынлап та, яҙыусының фекере ысынбарлыҡҡа тап килә. Олатай-өләсәйе генә түгел, Фәрзәнәнең атаһы Фәтих ағай ҙа тыуған еренең патриоты, милли рухлы кеше. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенә һөйөүҙе әсәһе — ошо фәнде оҙаҡ йылдар уҡытҡан Шәфиғә апай тәрбиәләгән. Шағирә, «Башҡортостан ҡыҙы» журналының баш мөхәррире Йомабикә Ильясова ла унда белем алған һәм әҙәбиәткә юл ярған.

Әҙәби әҫәрҙәрҙе кесе йәштән үҙ иткән Фәрзәнә Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романын беренсе класта уҡ уҡып сығып, өйҙәгеләрҙе таң ҡалдырған. Быға ышанып уҡ етмәгән, маҡтаныуҙы өнәмәгән Фәтих ағай китаптың йөкмәткеһен һөйләргә ҡушҡан.

Фәрзәнә әҙәбиәткә шунда уҡ килмәй: уның романтикаға бай күңеле Өфөләге 2-се республика педагогия училищеһының художество-графика бүлегенә тарта. Артабан БДУ-ның



05-2001.p65 168 30.07.01, 9:50

филология факультетында уҡый. Университет Аҡбулатованы әҙәбиәт мөхитенә алып инә. Каникул ваҡыттарында «Йәншишмә» гәзите редакцияһында ла эшләп ала. Ошонда уның журналист булыу теләге көсәйә. Өсөнсө курста уҡып йөрөгән еренән Мәскәү дәүләт университетына барып инә.

«Башҡортостан» гәзите редакцияһында эшләгәндә уға райондан-районға командировкаға йыш сығырға тура килә. Гәзит биттәрен әхлаҡ темаһын яҡтыртҡан мәҡәләләр менән биҙәй. Төрлө яҙмышлы, төрлө ҡарашлы милләттәштәребеҙ менән осрашыу Фәрзәнәнең сәйәси рухын нығыта.

Фәрзәнә Аҡбулатова «Башҡортостан» радиоһында оҙаҡ йылдар «Тулҡын» тапшырыуҙарын алып бара. Милли азатлыҡ, шәхес һәм хоҡуҡ, туған телде һаҡлау һәм яҡлау, әҙәбиәт, мәҙәниәт темалары тураһында яҙыусылар, журналистар, төрлө өлкә белгестәре менән фәһемле һөйләшеүҙәр ойоштора. Эфирҙа үҙ-үҙен асыуға, фекерҙәре менән уртаҡлашыуға киң мөмкинлектәр таба.

— Ригала йөрөп ҡайтҡас, «Үҙгәртеп ҡороу Матбуғат йорто төҙөлөүҙән башланды» тигән мәҡәлә менән сығыш яһағайным. Ҡайһы берәүҙәр уны оҡшатып та бөтмәне. Беҙҙә ижад кешеһе, шул иҫәптән журналист мәнфәғәте ҡайғыртылмай. Башҡалабыҙҙа фатирһыҙ йөрөүсе йәш журналистарыбыҙ, әҙиптәребеҙ күп бит. Һуңғы йылдарҙа ғына әллә күпме мөһабәт банктар ҡалҡып сыҡты. Ә Ригала эш өсөн бөтә шарттар тыуҙырылған, иң матур, иң күркәм йорт — Матбуғат йорто. Ул инде ҡышын туңып, йәйен тонсоғоп ултырыр ситлек түгел. Был хәлде яҙыусы күңелендә йәшереп ҡала алмай, әлбиттә, — тип үкенеп тә ҡуя әҙибә.

Палдиски ҡалаһындағы Салауат Юлаев һәйкәле яҙмышы тураһындағы «Шоңҡар» журналында донъя күргән мәҡәләләре Аҡбулатованың тынғыһыҙлығын тағы бер дәлилләп тора. 1989 йылда батырыбыҙ һәйкәлен асҡанда, республикабыҙҙан был тантанала ҡатнашҡан делегация етәкселәре, ни эшләптер, урындағы халыҡ менән аралашыуҙы кәрәк тапмай, ҡала эргәһендәге Рәсәй хәрби диңгеҙ базаһы хужалары менән генә килешеү төҙөй ҙә ҡайта. Быны белеп ҡалған эстондар: «Беҙҙе һанға һуҡмауҙы аңлата был. Һәйкәл шунлыҡтан Эстонияның архитектура, скульптура өлкәһендәге ҡомартҡыларҙы һаҡлау буйынса реестрына индерелмәй тигән һүҙ», — тип иғлан итәләр. Бюсты килтергәндәр, ә постаменты хаҡында хәстәрлек күрелмәгән. Март Антс атлы эстон егете ярҙамға килә. Салауат Юлаев шәхесе, башҡорттарҙың тарихы менән ҡыҙыҡһынған скульптор-рәссам машинаға тип йыйған аҡсаһын һис йәлләмәй бығаа, иҡтисади, мәҙәни яҡтан үсешкән Башҡортостандың был эште буш ҡалдырмауына ышана. Фәрзәнәнең һөйләүе буйынса, ауыр ваҡытта ярҙам ҡулы һуҙған эстон егетенә беҙҙең республика һаман да бурысын ҡайтарып бирмәгән.

Фәрзәнә күрше һәм туғандаш халыҡтар менән аралашып йәшәүҙе, бер-беребеҙҙән өйрәнеүҙе һәм ихтирам итеүҙе хуплай. Былтыр Әзербайжанда үткәрелгән «Донъя ҡатын-ҡыҙҙары һәм ҡатын-ҡыҙ донъяһы» тигән төрки ҡатын-ҡыҙҙары форумында ҡатнашып ҡайтҡас та яҙған мәҡәләләрендә, радиотапшырыуҙарында ошо хаҡта бәйән итте. Әзербайжандың күп кенә ҡала-райондарында эшлекле ҡатын-ҡыҙҙар менән осрашҡанда уны бер нәмә һоҡландыра: Әзербайжан ҡатын-ҡыҙҙары хөкүмәттең һәр бер органы эшендә актив ҡатнаша икән, уларҙың бишәүһе район хакимиәте башлыҡтары вазифаһын үтәй.

— Баҡыла минең Гөлли исемле дуҫым йәшәй. Үҙе филолог. Төрки халыҡтарының тарихын, йолаларын өйрәнә. Беҙ уның менән байтаҡ ҡына хат алыштыҡ. Мин уға Зәки Вәлиди, Шәйехзада Бабич тураһында материалдар ебәреп торҙом, улар әзербайжан телендәге ваҡытлы баҫмаларҙа донъя күрҙе. Үҙгәртеп ҡороу осоронда әзербайжан халҡы беҙҙең оло шәхестәребеҙ хаҡында Гөлли аша ишетеп йәшәне. Баҡыла ойошторолған Төрки халыҡтарҙың фольклор һарайында Башҡортостанға арналған витринаны биҙәүҙә Миңниса Баһуманова менән ярҙам иттек: ул китаптар ебәрҙе, мин кассеталар һалдым.

Фәрзәнә Аҡбулатова һаман да тынғыһыҙ эҙләнә, ижад итә, йәмғәтселек эшендә йөҙөп эшләй. Журналист эшмәкәрлегендә тормош тәжрибәһе, аралашыу даирәһенең киңлеге, туған телде, халҡынды яҡшы белеү мөһим роль уйнай. Бына шуға ла йәш журналистар араһында Фәрзәнә Фәтих ҡыҙы Аҡбулатова журналист багажын байытыу хаҡында һүҙ йөрөтөргә тырыша, сөнки ул үҙе күп нәмәнең кешенең үҙенән килгәнен, тырышлығынан, ныҡышмалығынан тыуғанын яҡшы аңлай.



05-2001.p65 169 30.07.01, 9:50